БЕҘҘЕН
ӨЙҘӨҢ ЯҢЫЛЫКТАРЫ
МӘҒЛҮМӘТ БИТЕ
“48-се Башҡорт лицейы“ Өфө ҡалаһы
Май, 2019 йыл Осҡондан ялҡын ҡабына

# Бөйөк Еңеүгә – 74 йыл!



Еңеү! Ҡояш балҡый бер битендә,
Бер битендә – моңһоу ай һаман,
Бер күҙеңдән шатлыҡ нуры һибелә,
Бер күҙеңдән әсе йәш тама…

9 май … Ошо бәләкәй генә бер һандан һәм өс хәрефтән торған һүҙҙә бик ҙур тарихыбыҙ урын алған. Эйе, был дата бер ғаиләне лә урап үтмәгәндер.

1941 йылдың 22 июнь айының иртәһендә сәғәт дүрттә фашистик Германия беҙҙең илебеҙгә һөжүм итә. Бөйөк Ватан һуғышы башлана. Тыуған илебеҙ, тыуған еребеҙ өсөн йәш егеттәр-ҡыҙҙар, ағайҙар, атайҙар, олатайҙар ҡулдарына ҡорал тотоп яуға күтәреләләр. 1418 көн һәм төн барған ҡаты алыштарҙан һуң 1945 йылдың 9 майында беҙҙен тыуған илебеҙ Еңеү яулай. Халҡыбыҙ бик күп юғалтыуҙар кисергән. Етем балалар, тол ҡатындар, улдарының ҡара ҡағыҙҙарын алған салланған сәсле әсәләр…Минең дә Шәһәрғәзе олатайым һуғышта ҡатнашҡан. Ул командир булған. Сталинград ҡалаһында барған иң ҡаты һуғыштарҙың береһендә ҡатнашып бик ҡаты яраланып ҡайтҡан. Ошо яраларынан оҙаҡ йылдар һыҙланып бик иртә мәрхүм булған. Мин уны фоторәсеме һәм өләсәйем һөйләүе буйынса ғына беләм. Олатайым хәтирәләре: “ Иң ҡаты һәм оҙайлы һуғыш Сталинградта булды. Сөнки артта Урал. Сталиндың бойороғо буйынса: ” Гитлерға Уралды бирмәҫкә. Әгәр Гитлер Уралды алһа, беҙҙе еңәсәк. Шуның өсөн алға тик алға, бер аҙым артта сигенмәҫкә. Кемдәр арттҡа сигенә, атырға…” Этажлы йорттар. Һәр баҫҡыс, һәр этаж, һәр фатир өсөн һуғыштыҡ. Бер этажда фашистар булһа, икенсеһендә беҙҙекеләр ине. Һуңғы һуғыш Перактор майҙанында булды, шунда ҡаты яраландым инде…”

***Мирхәйҙәрова Индира, 11-се класс***



# Сығары











Уҡытыусым! Һин бит түгел
Хәреф яҙырға өйрәтеүсе.
Беҙҙең өсөн һин мәңгегә
Киләсәккә аҡ юл күрһәтеүсе!

***Даутова Алһыу***









Беҙҙең өсөн күпме тырыштың һин,
Уйландырҙың беҙҙе һәр ваҡыт
Рәхмәт һиңә барыһы өсөн дә,
Онотмайбыҙ, мәктәбем һине бер ваҡыт.

***Зарипова Азалия***



# лыш-2019





***Иҫемдә алтын һукмакка,***
***Тәү аяк баҫкан көнөм.***
***Һәм тормошом китабының***
***Тәү битен аскан көнөм.***







Уҡытыусым, беҙгә һаман

Терәкһең һәм кәрәкһең.
Бәхеттәрҙең иң олоһо
Һиңә һәр саҡ эләкһен!

***Рәфғетдинова Регина***





Уҡытыусым, миңә маяк булдың,
Етәкләнең алға барырға.
Аҙашканда миңә юл күрһәттең
Ирек бирмәнең һин арырға.

***Ғилманова Индира***







Туған тел... Ул шундай үҙенсәлекле,тылсымлы , яғымлы һүҙ… Был һүҙҙе ишетеү менән, тыуған ер, тыуған йорт,әсәкәйем күҙ алдына килеп баҫа. Һәр бер халыҡтың үҙ туған теле- иң ҙур байлығы, сөнки ул халыҡтың тарихын, милли үҙенсәлеген һаҡлай.Бәләкәй саҡтан уҡ тел беҙгә яңы тылсымлы донъяны аса.Телһеҙ йәмғиәт тә йәшәй һәм үҫешә алмай, сөнки ул - бер- беребеҙ менән һөйләшеү,аңлашыу, аралашыу сараһы. Туған тел булғанда ғына, һәр кемдең үҙ туған рухы була.

Эйе, бөгөнгө көндә башҡорт халҡының үҙ суверенлы республикаһы бар, башҡорт телебеҙ дәүләт теле итеп иғлан ителгән. Ләкин былар ғына етәме һуң? Юҡ, әлбиттә. Минең уйымса, телебеҙҙе дәүләт кимәлендә күтәреү кәрәк. Мәҫәлән, юғары урын биләүселәргә башҡорт телен белеү - мотлаҡ, ә 11-се класты тамалаусыларға рус теле менән бер рәттән башҡорт теленән берҙәм дәүләт имтиханын тапшырыу талабын ҡуйырға . Юғары уҡыу йорттарында башҡорт телен өйрәнеүҙе дауам итеү мөмкинселектәре булдырырға. Шул саҡта, туған телебеҙ, башҡорт теленә, ҡарата ҡараш та ыңғай яҡҡа үҙгәрер ине. Татарстан, Ҡырғыҙыстан, Ҡаҙағстан , Үзбәкстан кеүек республикаларҙың башлыҡтарының туған телдәрендә сығыш яһауҙарын тыңлап, һоҡланып туя алмаҫһың. Ә беҙ кемдән кәм? Тигән һорау тыуа минең күңелдә. Эйе, Башҡортостан – күп милләтле республика булһа ла, башҡорт теле н - дәүләт теле булараҡ, һәр кемгә белеү кәрәк. Хәҙерге заманда туған телде белмәү,башҡорт теленең юҡҡа сығыуына килтерәсәк. Был бөгөнгө көндөң төп проблемаһы. Әле беҙ йәшәгән быуын үҙ телендә һөйләшә, әммә бик һирәге генә. Мин бының өсөн бик борсолам. Киләсәк быуынға,беҙҙең балаларыбыҙға, нимә ҡалыр икән ?

Был хаҡта Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев та күптән борсолған . Ул үҙенең “Халҡыма хат” тигән поэмаһында тел проблемаһын 1989 йылда уҡ күтәрә. Үҙ телен белмәгән кеше “оҙаҡҡа ҡалмай”. Һәр кем үҙ туған телен белергә, өйрәнергә тейеш. Тейеш кенә түгел, ә бурыслы!

Бергә ҡушылып, туған телебеҙҙе һаҡлау маҡсатын үҙ алдыбыҙға ҡуйһаҡ, беҙ телебеҙҙе юҡҡа сығыуынан һаҡлай алабыҙ тигән фекерҙә Рауил Бикбаев. Әлбиттә, шағир менән ризалашмай булмай.

Беҙҙән башҡа телебеҙҙе һаҡлаусы юҡ. Бәләкәй саҡтан уҡ сабыйҙарға үҙ телендә һөйләшергә, “Мин –башҡорт!” -тип ғорур әйтергә өйрәнергә кәрәк. Илһеҙ, телһеҙ милләт булмай. Әсә телендә бала донъяны танып белә. Уның шул телдә фекерләү даирәһе, зауығы үҫә. Баланың туған теле әсә һөтө менән ҡанына һеңә. Тел кешеләр менән аралаштыра, белем, ғилем бирә.

Туған тел- үҙ байлығыбыҙ, беҙҙең яҙмышыбыҙ. Тел – тере шишмә. Телдең дә, илдең дә киләсәге беҙҙең ҡулда. Беҙҙең һәм киләсәк быуындың телендә мәңге шулай ғорур яңғыраһын ине башҡорт теле. Телебеҙҙе әле һаҡлап ҡалмаһаҡ, аҙаҡтан һуң булыуы ихтимал. Башҡорт теле юҡҡа сыҡһа, беҙҙең халҡыбыҙ, тарихыбыҙ юҡҡа сығасаҡ!

Туғанынан яҙған- ярты йәтим,
Туған теленән яҙған- мең йәтим,
Телде тоҙаҡларлыҡ ғәмһеҙлектән
Уян, халҡым, ҡуҙғал, милләтем!

***Рәфғетдинова Регина, 11-се класс***

Баш мөхәррир: Ильясова Г.М. Компьютер версткаһы: Стрижова И.М
Мөхәрриәт: 10-11 класс уҡыусылары.